14
ВОСХОД
№51 (10098)
Пятница
29 декабря 2023 года
АРГАЯШ МЕДИА
ARGAYASH.COM

АРҒУЖА
БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ МАХСУС БИТ №12 (153)
ДЕКАБРЬ, 2023 ЙЫЛ

# Яңы йыл менән!

ТАРИХ

## АРҒАЯШ ДАНЫ

### АРТИСТАРЫБЫҘ УҘЫП БАРҒАН ЙЫЛДА ҮҘҘӘРЕН НИСЕК КҮРҺӘТТЕ

**Беҙҙең артистар «Башҡорт даны» өлкә фестивалендә район исеменән лайыҡлы сығыш яһаны.**

**МАРАТ АБДУЛВӘЛИЕВ,** *корреспондент*
t.me/abdulvaleyev
**Дмитрий КУЗНЕЦОВТЫҢ фотоһы**

Силәбелә башҡорт мәҙәниәте фестивале үтте, унда силәбеләр һәм ҡала ҡунаҡтары арғаяштарҙың сығыштарын юғары баһаланы.

Арғаяш районы исеменән 2-се Арғаяш урта төп мәктәбе уҡыусыны **Аделия Әлибаева**, Нуркин ауыл биләмәһенең клуб системаһы методисты **Милә Солтанова**, ҡурайҙа уйнау серҙәренә өйрәтеүсе уҡытыусы **Ильһам Йәғәфәров** һәм уның уҡыусыны **Алмаз Бикмәтов**, «Йондоҙ» продюсерлыҡ үҙәге артистары **Альбина Солтанова, Вилиә Кучукова, Заур Сәйетхужин** сығыш яһаны.

Байрамды «Йондоҙ» продюсерлыҡ үҙәге ойошторҙо. Үҙәк етәксеһе **Илдар Хөснөтдинов**: «Фестивалдең маҡсаты – башҡорт мәҙәниәте энтузиастарын билдәләү», – тип һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Советтар Союзы ваҡытында йыл йырын бәйгеһен ойошторғандар. Йылдың иң яҡшы артистарын билдәләгәндәр. Беҙ бындай сараны беренсе тапҡыр үткәрәбеҙ, шуға күрә йыл дауамында айырылып торған күрһәткестәре өсөн барыһын да билдәләп китергә ҡарар иттек.

**ЛАРИСА ДОЛИНА ӨСӨН КОНЦЕРТ**

Арғаяштар өсөн быйылғы йыл бик емешле булды. Кремелдә сығыш яһау, телевизион конкурстарҙа яулаған еңеүҙәр... Ошо бәйгеләр хаҡында әсәле-ҡыҙлы Аида һәм Аделия Әлибаевалар ентекле һөйләй.

– Тулҡынландырғыс, әммә беренсе йыл ғына сығыш яһамайбыҙ, шуға барыһы ла яҡшы буласаҡ. Ике йыл элек **Алина Ғүмәровала** шөғөлләнә башлағайныҡ. Ул беҙҙе дәртләндереп ебәрҙе һәм артабан да шөғөлләнеү кәрәклеген әйтте, сөнки Аделия һәләтле, уның мөмкинселектәре лә бар, – тип һөйләй йәш артистың әсәһе Аида Әлибаева.

Бөгөн Аделия Лада Марущактың силәбе вокал студияһында шөғөлләнә, унда йәш артист башҡорт телендә генә түгел, рус һәм хатта инглиз телдәрендә лә йырлай. Аделия тулҡынланыуҙы бик яҡшы еңә ала. Тамашасыларҙың тулы зал буласағын белһә лә, ҡыҙ үҙен тыныс тота.

Былтыр ноябрҙә Аделия «Йондоҙ» конкурсында беренсе дәрәжә лауреат исеменә лайыҡ булды. Был ваҡиғанан һуң ҡыҙҙы Силәбе сиктәрендә лә йыш күреп ҡалалар. Күптән түгел әсәле-ҡыҙ Өфөнән ҡайтты, унда «Сулпылар» конкурсында Аделия икенсе урын яуланы.

Ә былтыр яҙ ҡыҙ Мәскәүҙә «Талантлар альянсы» үткәргән сарала ҡатнашты. Мәҫәлән, «Яҙ Парады» конкурсында Аделияға жюри ағзаһы Юлиана Виторт иғтибар итә. Ул Арғаяш йырсыһын Кремлдә балаларҙы яҡлау Көнөнә арналған концертҡа саҡыра. Аделия сәхнәлә билдәле артистка Лариса Гордьера менән бергә бөтә Рәсәйҙән йыйылған талантлар составында сығыш яһай. Тамашасылар араһында Лариса Долина, Этери Бериашвили һәм башҡалар була.

Аделияға һигеҙ йәш тулды, ул Арғаяштағы 2-се мәктәптең икенсе синыфында уҡый. Киләсәктә ул билдәле артист булырға теләй. Унан барыһы ла килеп сығырына шик юҡ.

**ИКЕНСЕ ЙӘШЛЕК**

Милә Солтанова арғаяштарға ижади ойошторочусы, театр артисы булараҡ ҡына түгел, йырсы булараҡ та билдәле. Башҡорт мәҙәниәте фестивалендә ул «Оноттом» ретро-йырын алып килде.

– Һәр йыл ижади йәһәттән ҡыҙыу үтә, 2023 йыл да был йәһәттән ситтән тороп ҡалманы. Һәр ваҡыт яңы идеяларҙы һәм проекттарҙы тормошҡа ашырырға тырышам. Хәҙер Нуркин ауыл биләмәһендә эшләйем, быйыл оло йәштәгеләр көнөнә Беҙ «Супер ҡартнәй» өләсәйҙәр конкурсын үткәрҙек. Шулай уҡ Аязғол биләмәһе менән берлектә ошондай уҡ сара үткәрелде. Артабан проект өҫтөндә эшләйәсәкбеҙ-тамашасыларға оҡшаны, – ти Милә Кәшәф ҡыҙы.

Ул Илдар Хөснөтдинов тураһында эшсән егет булыуы һәм башҡорт мәҙәниәтен үҫтереү һәм пропагандалау өсөн күп эштәр башҡарған энтузиастарҙың береһе икәнлеге хаҡында йылы һүҙҙәр әйтә. Милә Солтанова: «Яңы йондоҙ» – йәш башҡаруысыларға ҙур сәхнәгә сығырға мөмкинлек биргән әһәмиәтле проект», – тип билдәләнә.

– Мине лә ҡушып саҡырыуҙары ҡыуаныслы, – тип үҙ тәьҫораттары менән уртаҡлашты әңгәмәсем.

**ТЫЛСЫМЛЫ КӨЙҘӘР**

«Арғужа» уҙып барған йылда ҡурайсыларыбыҙ хаҡында күп яҙҙы. Остазы Ильһам Йәғәфәров һәм уның уҡыусыны Алмаз Бикмәтов арғаяш ҡурайын тыуған иленән ситтә лә данлай. «Башҡорт даны» фестивалендә Улар Илдар Хөснөтдиновтың башланғысын хупларға һәм тамашасыларға был юлы ла ҡурайҙың тылсымлы яңғырашын күрһәтергә килде.

– Беҙ бер төбәктә йәшәйбеҙ, үҙ-ара татыу булырға һәм берҙәм механизм кеүек эшләргә тейешбеҙ, – тине Ильһам Йәғәфәров.

Арғаяш ҡурайсылары өсөн йыл бик һөҙөмтәле үтте. Гран-при ла, беренсе урындар ҙа күп булды. Иң ҙур уңыш – «Елкән» телевизион конкурсы. Унда Алмаз Бикмәтов «Башҡортостан Юлдаш телевидениеһы» һәм «Тамыр» телеканалдарының тура эфирында симфоник оркестр менән уйнап, беренсе урын яуланы.

«Башҡорт даны» фестивалендә Алмаз дуэт номерҙа аккомпанемент сифатында һәм яңғыҙ сығыш яһаны. Ҡурайсы «Колой кантон»ды уйнап, фестивалдең Арғаяш бүлексәһен асты.

Ҡурайсының үҙенең айырым визит карточкаһы юҡ – ул төрлө яҡлы. Ваҡыт булғанда, Алмаз яңы көйҙәр өйрәнә. Мәҫәлән, Арғаяштағы йәштәр слетында ул ҡурайҙа «Despacito» латиноамерика хитын уйнай, был йәштәрҙе таң ҡалдыра. Башҡорт халыҡ музыка ҡоралын ошо рәүешле яҡшыраҡ пропагандалауҙы таба алмаҫыңыҙ, моғайын.



Йәш булыуына ҡарамаҫтан, Аделия Әлибаева Мәскәү Кремлендә сығыш яһаны.

## АҪЫЛТАШ

Аҡбаш еренең аҫылташы булған Вилиә Кучукова Арғаяш районынан булыуы менән ғорурлана.

– Бөгөн дә өлкә сәхнәһендә тыуған районымды күрһәтеү минең өсөн оло хөрмәт. **Гүзәл Ғафарова** һәм **Гөльямал Нәзмиева** яҙған «Доньяла иман булһын» исемле йыр менән Өфөлә сығыш яһаным. Мин бөтә донъяла тыныслыҡ булыуын, кешеләрҙең татыу йәшәүен теләр инем, – тип үҙ фекере менән уртаҡлашты Вилиә.

Артистың планынды торған соло концерты бар. Ул уны киләһе йылда үткәрергә өмөтләнә. Шулай уҡ ул башҡорт халыҡ йырҙарына арналған альбом әҙерләй. Ҡурайсы Алмаз Бикмәтов һәм продюсер Илдар Хөснөтдинов, шулай уҡ бер төркөм музыканттар менән бергә улар боронғо көйҙәрҙе өйрәнеү өҫтөндә.

## КИҪКЕН ҮҘГӘРЕШТӘР

Ҡамыш ауылынан Альбина Солтанова «Йондоҙ» башҡарыусылары исемлегенә сағыштырмаса күптән түгел инде. Әммә был ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ул команда составында үҙен таныта алды һәм команданың тулы хоҡуҡлы ағзаһына әүерелде.

– Мин «Йондоҙ»ға 2020 йылда, яңы йыл концертында ҡатнашыу өсөн һайлап алыу турынан үткәндә килдем. Бының өсөн Илдар Хөснөтдиновҡа рәхмәтлемен. Уның менән танышҡандан һуң минең тормошом ҡырҡа үҙгәрҙе, ижади күтәрелешем башланды. Илдар ағай үҙ мәҙәниәтенә битараф булмағандарҙың берене, уны үҙ инициативаһы буйынса, бер кемдең ярҙамынан тыш үҫтерә, – тип белдерҙе Альбина.

Артистка Силәбе металлургия мәҙәниәт һарайы сәхнәһендә Илнар Ғәниевтең «Йөрәгемдә ҡалды» (иҫәп буйынса 4-се) йырын башҡарҙы. Киләһе йылда йырсы тағы бер йыр яҙҙырырға ниәтләй. Был ҡаҙаныштар менән генә ул туҡталырға йыйынмай. Альбина клип төшөрөргә ниәтләй, ә был уның күптәнге хыялы. «Юлдаш» радиоһы эфирына сығыу өсөн тырыша ул. Дебют музыкаль альбомы ла яҡынлаша.

Фестивалдә ҡатнашыу өсөн Альбина тағы ла тамашасыларҙың тауыш биреү юлы менән үтә һәм еңел генә еңеү яулай. Ҡыҙҙың әйтеүенсә, тамашасыларҙың уны яратыуын аңлауы уның өсөн ҙур хөрмәт.

Илдар Хөснөтдиновтың тағы бер цитатаһын килтереп үтеү урынлы булыр: «Беҙҙең фестиваль – улүҙенсәлекле берләшмә». Эйе, Илдарыбыҙ үҙенең эше менән мөһим миссияны – башҡорт мәҙәниәтен популярлаштырыуҙы башҡара. Уның продюсерлыҡ үҙәге үткәргән сараларға йәштәр ҙә, өлкән йәштәге тамашасылар ҙа шатланып килә. Уның еңел ҡулы менән ҙур сәхнәгә күп кенә арғаяш авторҙары һәм башҡарыусылары юл таба. Илдар Хөснөтдиновҡа һәм уның командаһына яңы ҡаҙаныштар һәм ижади уңыштар теләйбеҙ.



Вилия Кучукова ижади пландар һәм идеялар менән янып йәшәй.



Альбина Солтанова өлкә сәхнәһендә тыуған ауылын данлай.



Милә Солтанова сәхнәлә икенсе йәшлеген кисерә.




Заур Сәйетхужин тамашасылар һөйөүен яулай.



Илһам Йәғәфәров Һәм Алмаз Бикмәтовты башҡа өлкәләр ҙә яҡшы таный.

**Махсус битте Марат Абдулвәлиев әҙерләне. Тәржемә: Нурия Иҡсанова. Мәҡәләләрегеҙҙе түбәндәге адрес буйынса килтерегеҙ: Арғаяш, Комсомол урамы, 25, «Арғаяш-Медиа». Яңылыҡтар өсөн телефон: 8 (35131) 2-01-69. Беҙҙең электрон почта: argayash-m@yandex.ru.**